

Әбделмәмбәт урта мәктәбе Килдеғол филиалының VII класс уҡыусыһы Билалова ФизәлиәАйрат ҡыҙы

**Бөрйән районы,  Килдеғол ауыл китапханаһы**

# «Бөйөк Ватан һуғышы ғаиләм тарихында» конкурсына

**Етәксеһе:**
Кульбердина Әлфиә Нуретдин ҡыҙы,
тарих уҡытыусыһы

2020 ЙЫЛ.

Бөйөк Ватан һуғышында беҙҙең ауылдан 42 кеше ҡатнаша. Уларҙың 17-һе яу ҡырында башын һала. Яугирҙарҙан Көмөшбаев Шәһит “Ҡыҙыл Байраҡ”, 1-се «Ватан һуғышы», Искужин Абдулла “Ҡыҙыл Йондоҙ”, Искужин Муса III дәрәжә Дан ордены менән наградланған.

Һуғыштан әйләнеп ҡайтыусылар ҙа, үкенескә күрә, бөгөн иҫән түгел. Иң һуңғы яугир Көмөшбаев Шәһит Исмәғил улы – минең ҡарт олатайым, олатайымдың атаһы.

# Гвардия өлкән сержанты Көмөшбаев Шәһит Исмәғил улы



# ТЫУҒАН АУЫЛЫ - КИЛДЕҒОЛ



# шәжәрәhе

КӨМӨШБАЙ

↓

ӘХМӘТЙӘН

↓

СӘФИУЛЛА

↓

ШӘҺИТ

↓

Мөхәммәт

↓

Дилфүзә

↓

Физәлиә

# МӘКТӘП МУЗЕЙЫНДА






* Көмөшбаев Шәһит Исмәғил улы 1914 йылда Бөрйән районы Килдеғол ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда Белорет районында эштә була һәм һуғыштың тәүге көндәренән үк, ауылына ҡайтып та тормай, үҙ теләге менән һуғышҡа китә. Гвардия өлкән сержанты Шәһит Исмәғил улы 246-сы уҡсы дивизияның 914-се полкында отделение командиры була. Төнъяҡ-көнбайыш,1-се Балтик буйы, 1-се Украина, 4-се Украина фронттары составында һуғыштарҙа ҡатнаша. 4 мәртәбә яралана. Һуңғы яраны Латвияла ала. Был яранан бик оҙаҡ госпиталдә ятырға тура килә.

Шәбәйгәс тағы ла фронтҡа китә. Һуғыштан ҡайтҡас өйләнә. Олатайым өйләнгәс, тәүҙә Ҡотан, Мәндәғолда колхоз рәйесе, парторг булып эшләй. Һуңынан ауылға ҡайта ла колхозға эшкә төшә. Өләсәйем һатыусы эшенә тотона һәм пенсияға сыҡҡансы һатыусы булып эшләй. Өләсәйемдең һөйләүе буйынса, яралары, бигерәк тә аяғы һыҙлап ыҙалатыр булған, маңлайын ҡаш буйлап һыҙып үткән пуля эҙенән ҡаштары ялбырлап үҫеп китер булған, илай-көлә уларҙы ҡырҡып алыр булған. Уның һыҙланыуҙарын өләсәйемдән, балаларынан башҡа берәү ҙә белмәгәндер, моғайын.Һыр бирергә яратмаған ул,.

# ТОРМОШ ИПТӘШЕ
# ХӘНИФӘ ҒӨБӘЙТ ҠЫҘЫ МЕНӘН



Өләсәйем менән 34 йыл бик матур, һоҡланғыс ғүмер кисерәләр. 1980 йылда бик иртә, 66 йәшендә генә был донъянан китеп бара ул, 3 ейәнен, 1 ейәнсәрен генә күреп өлгөрә. Ә хәҙер, Аллаға шөкөр, олатайым менән өләсәйемдең 22 ейән-ейәнсәре, 60 бүлә-бүләсәре бар. Һәр береһе был тормошта үҙ урынын тапҡан

Шәһит Исмәғил улы тураһында мәғлүмәт эҙләп олатайыма ла, олатайымдың һеңлеһе Зәйтүнә инәйемә лә, өләсәйемә лә, интернетҡа ла мөрәжәғәт иттем. Зәйтүнә инәйемдең төрлө йылдарҙа “Таң” гәзитендә баҫылған мәҡәләләре һаҡлана. Ундағы мәғлүмәттәр буйынса, һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн, Шәһит Исмәғил улы 1-се дәрәжә «Ватан һуғышы», «Ҡыҙыл йондоҙ» ордендары, «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән бүләкләнә

# Олатайым Сәфиуллин Мөхәммәт Шәһит улынан һорашам







# Ике китап авторы
# Айытбаева Зәйтүнә Шәһит ҡыҙы



# «ТАҢ» ГӘЗИТЕНДӘ СЫҠҠАН МӘҠӘЛӘ

*Күңел йәдкәре*

## Килдеғол ҡаһарманы

**Һәр кемдең ғорурланыр кешеһе, эше була. Ә беҙҙең ғорурланыр кешеләребеҙ атайым Көмөшбаев Шәһит Исмәғил улы (мәрхүм инде) һәм әсәйебеҙ Хәлитова Хәнифә Ғәбәйт ҡыҙы. Юҡ, был ябай яратыу түгел, ә хаҡлы рәүештә, аңлы рәүештә уларҙың ғүмер юлдарында ниндәй үрҙәргә артылыуын, ниндәй бейеклектәргә күтәрелеүен, ниндәй бөйөклөктәргә өлгәшеүен белеү, күреү, баһалау.**

Әсәйем Хәнифә Ғәбәйт ҡыҙы 1926 йылғы. Аллаға шөкөр, иҫән-һау, теремек. 87 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, һәр беребеҙҙе ҡунаҡ көткәндәй ҡаршы ала һәм ҡустәнәстәр тейәп оҙатып ҡала. Беҙ был тормошта әсәйемдең хәстәрлегенә, аҡыллы кәңәштәренә, изгелегенә таянып, уның күңел йылыһын тойоп йәшәнек. Етемлектә үҫеп, йәшлеге ауыр һуғыш йылдарына тура килеп тә, тормошҡа ғашиҡ булып йәшәгән әсәйемә һоҡланып бөтә алмайым. Хоҙай уны сәләмәтлектән, донъя бәрәкәтенән айырмаһын.

Бөгөнгө яҙаһы юлдарым атайым, уның күргән-кисергәндәре тураһында. Атайым Шәһит Исмәғил улы 1914 йылғы. Бер туған ҡустыһы Нух ағайым һәм тағы ла 3 һеңлеһе бар ине. Хәҙер бөтәһе лә гүр эйәләре инде, ауыр тупраҡтары еңел булһын. Атайымдың әсәһе Гөлйемеш өләсәйем йомшаҡ күңелле, изге бер йән булып иҫтә ҡалған. Нух ағайымдарҙа йәшәне, беҙҙә лә йөрөнө.



Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда атайым Белорет районында эштә була һәм һуғыштың тәүге көндәрендә үк үҙ теләге менән һуғышҡа китә. Гвардия өлкән сержанты булған атайым 246-сы уҡсы дивизияның 914-се полкында отделение командиры була. Төньяҡ-көнбайыш, 1-се Балтик буйы, 1-се Украина, 4-се Украина фронттары составында һуғыштарҙа ҡатнаша. Дүрт мәртәбә яралана. Һуңғы яраны Латвияла ала. Был яранан бик оҙаҡ госпиталдә ятырға тура килә. Яралары оҙаҡ уңала – барыбер бер аяғы ҡыҫҡарак булып ҡала. Һуғыш аҙағы булһа ла, ул тағы ла фронтка китә.

Атайым командир булыу өҫтөнә политрук та булып йөрөй, сөнки ул аңлы, абруйлы ғына түгел, оҫта ойоштороусы ла була.

Һуғышта күрһәткән батырлыктары өсөн "I дәрәжә Ватан һуғышы" ордены, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. Ә һуңғы ҙур наградаға "Ҡыҙыл байраҡ" орденына 1945 йылда, һуғыш аҙағында тәҡдим ителә.

1945 йылдың 6 июнендәге бойороҡ менән (пр.№0164/4) личный составынан 14 кеше ошо ҙур наградаға эйә була. Тик был хаҡта атайым белмәй ҡала. Һуғыш бөтөүгә Совет Армияһы һалдаттарға ныҡ ҡытлыҡ кисерә. Атайым тағы ла хәрби хеҙмәттә тороп ҡала. Гвардия өлкән сержанты Шәһит Көмөшбаев тыуған ауылы Килдеғолға 1945 йылдың декабрь аҙағында ғына ҡайтып төшә. 1946 йылда әсәйемә өйләнә. Ике йыл үткәс кенә ҙур бүләк – награда уны эҙләп таба.

"Орденды алғас, атайың иланы, - тип һөйләй әсәйем. – Шул тамуктан имен ҡайттым бит, ә күпме кеше ҡайта алмай ятып ҡалды. Был орденда шуларҙың өлөшө бар. Ошо һауаны һулармын, әсәйемде күрермен, үҙ ауылымда йәшәрмен тип уйламай ҙа торған инем. Хәйер, уйларлыҡ ваҡыт булдымы ни? Шулай ҙа һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән иҫән ҡайтарыуын һораным".

Атайым дингә битараф түгел ине, бик күп доғалар белде, беҙгә лә өйрәтә ине. Өләсәйем мәрхүмә лә намаҙ уҡыны, ураҙа ла тотто.

Әсәйемде алғас, атайым Мәндәғол, Ҡотан яҡтарында колхоз рәйесе булып эшләй, унан ауылына ҡайтып төпләнә. Бер төптән егелеп тарта улар донъя йөгөн. Әсәйем һатыусы булып эшләй, атайым – колхозда. Һис касан низағ тыуҙырып, ғауға сығарып йөрөмәне ул. Уны төрлөсә кәзекәләп, төрткөләп торһалар ҙа, һуғышып, боларып йөрөмәне. "Минең кеүек үк ут эсендә булып ҡайтһалар ине", - тип кенә ҡуйыр ине.

Ул ваҡытта ветеранға хәҙерге кеүек кәҙер-хөрмәт, иғтибар ҙа бигүк юк ине. Колхоздың әҙ генә эш хаҡына, һуңынан пенсияһына ҡәнәғәт булып ғүмер итте ул. Яралары, бигерәк тә аяғы һыҙлап ыҙалатыр ине. Ҡаш буйынан һыҙып үткән пуля эҙенән ҡаштары ялбырап үҫеп китер ине, илай-көлә уларҙы ҡырҡып алыр ине. Уның һыҙланыуҙарын әсәйемдән, балаларынан, өләсәйемдән башҡа берәү ҙә белмәгәндер, һыр бирергә яратмай ине ул. Беҙҙе лә "Ауыҙығыҙ тулы ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмәгеҙ", - тип көслө ихтыярлы булырға өйрәтте. Беҙ, биш балаһы, бөтәбеҙ ҙә эшкә шәп булдыҡ. Беҙҙе шуға ла яратып: "Минең бесәнселәрем, минең гвардиям", - тип кенә йөрөтә торған булды. 1980 йылда 66 йәшендә генә баҡыйлыкка күсте ул. Өс ейәнен, бер ейәнсәрен генә күреп өлгөрҙө.

Ә хәҙер, Аллаға шөкөр, әсәйемдең 22 ейән-ейәнсәре, 35 бүлә-бүләсәре бар.

Беҙгә шундай матур тәрбиә бирҙеләр улар. Һәр беребеҙ был тормошта үҙ урынын тапты. Сәкинәнән башҡаларыбыҙ (ағайым Мөхәмәт, Сания апайым һәм Мәймүнә һеңлем) пенсияла. Дүртебеҙ ҙә хеҙмәт ветераны.

Атайҙарҙың тормош юлдары беҙгә лә, киләсәк быуынға ла фәһемле. Беҙ илебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғо, азатлығы, тыныслығы өсөн көрәшкән ата-олатайҙарыбыҙҙың оло ҡаһарманлығы алдында баш эйергә, ошо гүзәл илдә йәшәй алыуыбыҙ менән уларға бурыслы булыуыбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Ниндәй гүзәл илдә йәшәйбеҙ беҙ! Ҡәҙерен беләйек. Илебеҙ өҫтөндә һәр ваҡыт азатлыҡ ҡояшы балкыһын. Хоҙай беҙҙе оло афәттәрҙән, ғәрәсәттәрҙән һаҡлаһын.

**Зәйтүнә АЙЫТБАЕВА.**
Ҡолғана ауылы.

*Уй төйөнө*


ОТЕЧЕСТВЕННАЯ ВОЙНА


ЗА ОТВАГУ
СССР


ОТЕЧЕСТВЕННАЯ ВОЙНА


СЛАВА


ПРОЛЕТАРИИ ВСЕХ СТРАН, СОЕДИНЯЙТЕСЬ!
С С С Р

Һуңғы ҙур наградаға – «Ҡыҙыл байраҡ» орденына һуғыш аҙағында тәҡдим ителә. 1945 йылдың 6-сы июнендәге бойороҡ менән (пр.№0164/4) менән личный составынан 14 кеше ошо юғары наградаға эйә булып, ул исемлектә олатайым да була.

Гвардия өлкән сержанты Шәһит Көмөшбаев тыуған ауылы Килдеғолға 1945 йылдың декабрь аҙағында ғына ҡайтып төшә. 2 йыл үткәс кенә ҙур бүләк – награда - «Ҡыҙыл байраҡ» ордены уны эҙләп таба.

- Орденды алғас олатайың иланы, - тип һөйләй өләсәйем, - шул тамуҡтан иҫән ҡайттым бит, ә күпме кеше ятып ҡалды, был орденда уларҙың да өлөшө бар тей ул.

Был турала мәғлүмәт интернетта ла бар. “Халыҡ хәтере “ тигән сайтта таптым ул мәғлүмәтте:

* Фамилия, имя, отчество: **Шагит Исмагилович Кумушбаев**
* Дата рождения военнослужащего: **__.__.1914**
* Время поступления на службу: **__.07.1941**
* Место призыва: **Белорецкий РВК, Башкирская АССР, Белорецкий р-н**
* Воинское звание на момент награждения: **гв. ст. сержант**
* Место службы: **914 сп 246 сд**

* Награда

* Чем награждён: **Орден Красного Знамени**
* Дата представления к награде:

## Кумушбаев Шагит Исмагилович

*гв. ст. сержант*
*в РККА с __.07.1941 года*
*место призыва: Белорецкий РВК, Башкирская АССР, Белорецкий р-н*
*номер записи в базе данных: 39323496, номер документа: 164/н*
*Список наград: Орден Красного Знамени; Орден Отечественной войны I степени; Орден Отечественной войны II степени; Орден Красной Звезды; Орден Славы III степени; Медаль «За боевые заслуги»*

**Орден Красного Знамени**— первый из советских орденов. Был учреждён для награждения за особую храбрость, самоотверженность и мужество, проявленные при защите социалистического Отечества. **Орден Красного Знамени** оставался высшим орденом Советского Союза.






Наградной лист
1. Фамилия, имя, отчество: Кумушбаев Шагит Исмагилович
2. Звание: гвардии ст. сержант
3. Должность и часть: Командир отделения 246 стрелковой дивизии 914 стрелкового полка
4. Год рождения: 1914 5. Национальность: башкир
6. Партийность: член ВКП(б) п/б № 5815440
7. Участие в гражданской войне, последующих боевых действиях по защите СССР и Отечественной войне: В боях на Северо-Западном фронте, I Прибалтийском фронте, I Украинском фронте, 4 Украинском фронте.
8. Ранения и контузии в Отечественной войне: Ранен 4 раза. 1. под Старой Руссой 2. под Старой Руссой 3. под
9. С какого времени в Красной Армии: с июля 1941 года
10. Каким РВК призван: Белорецким РВК Башкирской АССР
11. Имеет ли правительственные награды: нет
12. Постоянный домашний адрес представляемого к награждению и адрес его семьи.
[redacted]
13. Место рождения
14. Краткое конкретное изложение личного боевого подвига или заслуг: Гвардии старший сержант Кумушбаев Шагит Исмагилович не однократно участвовал в боях с немецко-фашистскими захватчиками. 4 раза пролил кровь за свою Родину. Достоин представления к правительственной награде орден «Отечественной войны» I степени.

# Зәйтүнә инәйемдә һаҡланған документ

Проверен

76

# Наградной лист

1. Фамилия, имя, отчество Кумушбаев Шагит Усмагилович
2. Звание гвардии ст. сержант.
3. Должность и часть Командир отделения 246 стрелковая дивизия 914 стрелковый полк.
4. Год рождения 1914 5. Национальность башкир.
6. Партийность член ВКП(б). п/б № 5215440.
7. Участие в гражданской войне и последующих боевых действиях по защите СССР и Отечественной войне В боях на Северо-западном фронте, I Прибалтийском фронте I Украинский фронт, 4 Украинском фронте.
8. Имеет ли ранения и контузии в Отечественной войне Ранен 4 раза. 1. под Старой Руссой. 2. под Старой Руссой 3. под Ромышево 4. в Латвии.
9. С какого времени в Красной Армии с июля 1941 года.
10. Каким РВК призван Билярацким РВК Башкирской АССР.
11. Имеет ли награды (за какие отличия) нет.
12. Постоянный домашний адрес представляемого к награждению и адрес его семьи. [redacted]
13. Место рождения [redacted]
14. Краткое конкретное изложение личного боевого подвига или заслуг. Гвардии старший сержант Кумушбаев Шагит Усмагилович неоднократно участвовал в боях с немецко-фашистскими захватчиками, в боях проявил отвагу и мужество. 4 раза пролил кровь за свободу и независимость нашей родины. Достоин представления к Правительственной награде Орден „Отечественная Война" I степени.

Начальник госпиталя
Майор медицинской службы [illegible] Назаренко

# Архивный источник

* Реквизиты документа: **ЦАМО. Фонд 33. Опись 687572. Единица хранения 2599.**

# Һуғыш ветеранына тиңләштерелгән тыл ветенаны – ҡарт өләсәйем Хәлитова Хәнифә Ғөбәйт ҡыҙы






# *Олатайым менән ҡарт өләсәйем

# Хәнифә өләсәйемдең йәш сағы



Ябай байрам түгел Еңеү көнө...
Күңел тула ошо көн етһә –
Ҡан ҡойоуҙар, юғалтыуҙар аша
Ҙур дан алып килгән ул илгә.

(З. Айытбаева)

Бөйөк Еңеүҙең 75 йыл тулыуы айҡанлы тапшырылған миҙал менән өләсәйем



08.06.2020.

...Ташлап киттең беҙҙе...

Оҙаттыҡ өләсәйемде мәңгелек йортона... Урыны ожмах түрендә, ауыр тупрағы еңел, ҡараңғы гүрҙәре яҡты булһын. Ҡалғандарыбыҙға Хоҙай түҙемлек, сабырлыҡ, һаулыҡ бирһен. Тыныс йоҡла, өләсәйем, үҙеңдең мәңгелек йортоңда.

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ


1. ПАПКА «ЯУГИР - АУЫЛДАШТАР»
2. «ТАҢ» ГӘЗИТЕ 2012 ЙЫЛ №131 (9459)
3. «ТАҢ» ГӘЗИТЕ 2015 ЙЫЛ №106-107 (9884-9885)
4. «ТЫУҒАН ТӨЙӘКТЕ ӨЙРӘНЕҮ» МУЗЕЙЫНДАҒЫ МАТЕРИАЛДАР

1. ЗӘЙТҮНӘ АЙЫТБАЕВАНЫҢ ШӘХСИ АРХИВЫ
2. ИНТЕРНЕТ РЕСУРСТАР

HTTPS://VETERAN1945.JIMDOFREE.COM/

HTTPS://PAMYAT-NARODA.SU/AWARDS/39323496

# ИҒТИБАРЫҒЫҘ ӨСӨН РӘХМӘТ!